# Халыҡ теле — хаҡлыҡ теле

"Ҡала башҡорттары: демография, тел һәм мәҙәниәт проблемалары" тип аталған IV төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференцияның Нефтекама ҡалаһында үткәрелеүе һис тә осраҡлы түгел. Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш төбәгендәге ҙур сәнәғәт һәм мәҙәниәт үҙәгенә әйләнгән был ҡалала 130 мең кеше иҫәпләнә. Халыҡтың 30 процентҡа яҡыны башҡорттар, ә бөтәһе бында 49 милләт вәкилдәре дуҫ һәм татыу йәшәй.

"Нефтекама ҡалаһында республикабыҙҙың милли-мәҙәни сәйәсәтенең мөһим йүнәлештәрен тормошҡа ашырыу буйынса бик күп эштәр башҡарыла, — тине Нефтекама ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы Олег Руденко конференцияны асҡан сығышында. — Нефтекама ҡалаһы ҡала округы хакимиәте эргәһендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса дәүләт программаһын бойомға ашырыу буйынса комиссия эшләй. Предприятиелар, учреждениелар һәм ойошмаларға филологик ярҙам күрһәтеү өсөн юғары профессиональ кимәлдәге терминология комиссияһы эшләп килә. Ул дәүләт органдары, ойошмаларҙың, урам исемдәренең яҙылышын, рәсми эш ҡағыҙҙарын алып барыуҙа ярҙам күрһәтә."

Хакимиәт башлығы әйтеүенсә, ҡаланың 23 дөйөм урта белем биреү мәктәбендә туған телдәр — башҡорт, рус, татар, мари телдәрен уҡытыу ойошторолған. Ошо рәүештә 10 мendән ашыу уҡыусы туған телен өйрәнә. Был уҡыу йылында уҡыусыларҙың 70 проценты башҡорт телен әсә теле булараҡ өйрәнгән. Бынан башҡа уҡыусыларҙың 18 проценты башҡорт телен дәүләт теле булараҡ үҙләштерә. Балалар баҡсаларында тәрбиәләнеүселәрҙең 31 проценты башҡорт телен өйрәнеүгә ылыҡтырыла. Ҡалала башҡорт гимназияһы уңышлы эшләй. 2006 йылдың 1 сентябренә гимназияның 550 урынлыҡ яңы бинаһын төҙөү тамамланасаҡ.

2006 йылдың ғинуарынан башлап бөтә урта мәктәптәрҙә, гимназияла һәм лицейҙа туған телдәр буйынса директор урынбаҫары штаты

булдырылған. Башҡорт теле уҡытыусыларының квалификацияһын күтәреү, башҡорт телен өйрәтеү алымдарын камиллаштырыу эше әүҙем алып барыла. Балалар баҡсаларында ла башҡорт теле уҡытыусыһы штаты булдырылған, уҡытыу һәм тәрбиә процесы башҡорт телендә алып барылған баҡса асыу мәсьәләһе хәл ителә.

Нефтекама башҡорттары ҡоролтайы ҡала хакимиәте менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләй. "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге төбәк-ара ижтимағи ойошмаһы филиалы үҙенең әүҙем эшмәкәрлеге менән ҡыуандыра.

Башҡорт дәүләт университетының Нефтекама филиалында филология факультетының башҡорт-рус бүлеге уңышлы эшләп килә. Унда көндөҙгө бүлектә 105 студент белем ала. Нефтекама педагогия колледжында "Башланғыс класта уҡытыу, башҡорт мәктәбе", "Мәктәпкәсә белем, башҡорт балалар баҡсаһы" тигән специальностар буйынса белгестәр әҙерләнә.

Ҡалала башҡорт телендә киң информация саралары, матбуғат баҫмалары һөҙөмтәле эшләй. Ә Нефтекама дәүләт филармонияһы башҡорт мәҙәниәтен профессиональ кимәлдә үҫтереүсе үҙәктәрҙең береһе булып тора.

Хатта еңелсә һанап ҡына киткәндә лә ҡалала туған телгә иғтибар, ҡала башҡорттарының мәҙәни һәм рухи үҫеше өсөн байтаҡ саралар эшләнгәне күҙгә ташлана. Был хужаларҙың республиканың төрлө төбәктәренән IV төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференцияға йыйылған ғалимдарға, журналистарға, бик күп райондарҙан килгән хакимиәт башлыҡтарына, уҡытыусыларға һәм башҡа ҡунаҡтарға күрһәткән ихлас һәм ифрат ҡунаҡсыл, дуҫтарса мөнәсәбәттәрендә лә сағылды. Конференция бик юғары кимәлдә ойошторолғайны. Унда ҡатнашыусылар тәрән йөкмәткеле докладтар менән сығыш яһаны, секцияларҙағы ултырыштарҙа ла ҡыҙыҡлы һәм иғтибарға лайыҡ мәғлүмәттәр яңғыраны, ваҡыт-ваҡыт ҡыҙыу бәхәстәр ҙә булып алды.

— Бөгөнгө көндә республика мәктәптәрендә уҡытыу 6 телдә ойошторолған, үҙаллы предмет булараҡ 14 туған тел өйрәнелә. 3125 дөйөм урта белем биреү учреждениеһының 1408-ендә уҡытыу туған телдә алып барыла, — тине Башҡортостан Республикаһы мәғариф министры Зөһрә Рәхмәтуллина. — 835 башҡорт, 404 татар, 32 сыуаш, 115 мари, 22 удмурт һәм башҡа милли мәктәптәр эшләп килә. Республикала 112 башҡорт гимназияһы һәм 42 лицейы, 11 татар, 1 сыуаш гимназияһы һәм лицейы иҫәпләнә.

Һуңғы 15 йыл эсендә милли мәктәптәр һаны — 1,7 тапҡырға, ә өйрәнелгән телдәр һаны 2 тапҡырға артты. Рәсәй Федерацияһында украин телен өйрәнгән 12 мәктәп булһа, шуларҙың 7-һе Башҡортостанда. Шул уҡ ваҡытта Ставрополь һәм Краснодар крайҙарында йәшәгән бер нисә йөҙ мең украин халҡы балаларын туған телгә бер нисә йәкшәмбе мәктәбендә генә уҡыта.

Татарстанда 15 мең башҡорт йәшәй, ә туған башҡорт телен өйрәнеү йәкшәмбе мәктәптәрендә бынан өс йыл элек кенә башланды. Ике йыл элек Яр Саллы ҡалаһында берҙән-бер башҡорт мәктәбе асылды. Сверд-

ловск өлкәһендә 40 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, ә башҡорт теле өйрәнелгән 3 кенә мәктәп бар. Пермь өлкәһендә 40 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, әммә балаларҙың башҡорт телен өйрәнергә мөмкинлеге юҡ. Ырымбур өлкәһендәге мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеүгә бүленгән сәғәттәр ҡыҫҡартылды, ә Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында башҡорт теле уҡытылған һуңғы мәктәп ябылды.

Министр әйтеүенсә, туған телде өйрәнеүсе рус булмаған уҡыусылар һаны республикала байтаҡҡа артҡан һәм 70 процент тәшкил иткән. Башҡорт милләтенән булған уҡыусыларҙың 91 проценты туған телен өйрәнә. Шул уҡ ваҡытта туған телдәрҙе уҡытыуҙың сифаты ла күтәрелә. Милли белем биреү эше менән идара итеү системаһының да камиллаштырыуға мохтажлығын күҙ уңында тотоп, дәүләттең милли белем биреү сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙа төп көс булып тороусы район һәм ҡалаларҙың мәғариф етәкселәре, туған тел буйынса методист һәм белгестәр өсөн даими рәүештә семинар-кәңәшмәләр ойошторола.

Милли белем биреү учреждениеларын кадрҙар менән тәьмин итеү өсөн республикабыҙҙың туғыҙ юғары һәм урта махсус уҡыу йортонда туған тел буйынса уҡытыусылар әҙерләнә. 2002 йылдан алып Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтында башҡорт теле уҡытыусыларын ҡайтанан әҙерләү курсы уңышлы эшләй. Уны тамамлаған уҡытыусылар икенсе юғары белемгә эйә булыуҙары тураһында диплом ала.

— Бөгөн мәғариф системаһының төп бурысы — һәр балаға сифатлы белем һәм тәрбиә биреү, туған телен, милли мәҙәниәтен, йолаларын өйрәнеү өсөн тейешле шарттар булдырыу, — тип йомғаҡланы сығышын Зөһрә Йыһанур ҡыҙы.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әхмәт Сөләймәнов республикабыҙҙа ”Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Закон ҡабул ителеү, башҡорт һәм рус телдәрен дәүләт телдәре итеп ҡанунлаштырыу милләтебеҙҙең йөҙөн һаҡлап ҡалыуҙа ышаныслы аҙым, тип билдәләне. Республикала башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү буйынса байтаҡ саралар күрелә. Әммә туған телдәрҙе өйрәнеү мәсьәләһе әлегә ҡәнәғәтләнерлек түгел, тип борсолоу белдерҙе ул һәм уның сәбәптәренә ентекле туҡталды, әсә телен өйрәнеүҙә заманса дәреслектәр кәрәклеген һәм инновация ысулдарын яҡшы белгән авторҙарҙы был эшкә конкурс нигеҙендә йәлеп итеү өлгөрөп еткән мәсьәлә булыуын билдәләне.

БР-ҙың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты председателе Юлай Ильясов та төплө доклад менән сығыш яһаны.

— БР-ҙың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты эшмәкәрлегенең иң мөһим йүнәлештәренең береһе — йәштәрҙе республиканың ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни тормошона йәлеп итеү, башҡорт йәштәренең милли үҙаңын нығытыуға арналған саралар үткәреү, — тине Юлай Талха улы. — Йәштәрҙең көс-ҡеүәтен һәм дәртен ыңғай яҡҡа йүнәлтеү, улар тормошта үҙ урындарын тапһын, фәндә, эш-

ҡыуарлыҡта, мәҙәниәттә һәм мәғарифта әүҙем ҡатнашһын өсөн шарттар тыуҙырыу бик мөһим.

Йәштәрҙе ылыҡтырыуҙа сағыу мәҙәни саралар ҙур урын алып тора. Шуға күрә БР-ҙың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты йыл һайын төбәк-ара йәштәр һабантуйы үткәрә. Былтыр ул Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 110 йыл тулыуға арналды һәм шағирҙың тыуған ерендә — Дүртөйлө районында ойошторолдо. Унда республикабыҙҙың ҡала һәм райондарынан 30-ҙан ашыу йәштәр делегациялары, күрше төбәктәрҙән делегаттар ҡатнашты. Быйыл йәштәр һабантуйы Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 175 йыл тулыуға бағышлана һәм Миәкә районында үткәреләсәк. Был сара ҡала һәм ауыл йәштәренең берләшеүенә һәм Башҡортостан халыҡтарының йола, мәҙәниәт һәм телдәрен өйрәнеүгә ыңғай йоғонто яһай. Башҡорт эстрадаһының ”Йәшлек-шоу” республика йәштәр фестивале, төрки йәштәренең ”Урал моңо” халыҡ-ара конкурс-фестивале, ”Башҡорт йәштәре көндәре” ҙур популярлыҡ яуланы.

Башҡортостан Республикаһының Башҡорт йәштәре союзының, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының йәштәр советы менән бергәләп эшләүе был эштәрҙе тағы ла йоғонтолораҡ итә. Әйтергә кәрәк, был берекмәләр йәштәрҙе ижтимағи әүҙемлеккә дәртләндереү менән бергә, тәрбиәүи эшкә лә ҙур әһәмиәт бирә. Бөгөнгө көндә башҡорт йәштәре башҡорт милләтенән булған социаль төркөм булараҡ, үҙаңға эйә. Был социаль төркөм урбанизация процестарында иң әүҙем булып тора, — тип белдерҙе Юлай Талха улы.

Шул уҡ ваҡытта йәш кеше өсөн күп милләтле ҡала мөхитендә үҙ урынын табыу, әлбиттә, ифрат ҡыйын. Был мәлдә уның осраған ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмауы, үҙ йөҙөн юғалтмауы, шул уҡ ваҡытта башҡа милләт вәкилдәре араһында конкуренцияға һәләтен үҫтереүе мөһим. Башҡорт йәштәренең Башҡортостандың төрлө милләт халыҡтары йәшәгән ҡалаларында яраҡлашыуына башҡорт милләтенең киләсәген билдәләйәсәк яңы быуындың булмышы туранан-тура бәйләнгән. Беҙгә йәштәрҙе ҡала шарттарына яраҡлаштырыуҙың ниндәй алымдары айырыуса йоғонтоло булыуын билдәләргә һәм уларҙы артабан үҫтерергә, яңы ысулдар табырға кәрәк. Күп милләтле ҡала шарттарында башҡорт йәштәрен уңышлы социаллəштереү өсөн традицион саралар ғына етмәй. Шуға күрә башҡорттарға заман талаптарына яуап биргән, йәштәрҙә милли үҙаң тәрбиәләй ала торған система булдырыу мөһим.

БР Юстиция министрлығы эргәһендәге ЗАГС идаралығы начальнигы Рәмилә Йомағужина демография һәм ғаилә мәсьәләләренә ҡағылышлы сығышында байтаҡ проблемалар күтәрҙе. Ул ил буйынса үлемдең тыуымдан йылдан-йыл артығыраҡ була барыуы, яңы тыуған балаларға мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушылыуы тураһында борсолоп һөйләне һәм фекерен раҫлаусы бик күп һандар килтерҙе.

Башҡорт дәүләт университеты профессоры Рим Янғужиндың төньяҡ-көнбайыш башҡорт ырыуҙары хаҡында сығышы тарихи мәғлүмәттәргә ифрат бай булды һәм тыңлаусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты.

БР Милләт һәм телдәр мөнәсәбәттәрен өйрәнеү үҙәге директоры Морат Кейекбаев "Хәҙерге заман шарттарында ҡала башҡорттарының проблемалары" тигән докладында яраҡлашыу процестарының ҡатмарлы мәлдәренә айырыуса етди иғтибар бирҙе һәм берәмтекләп һанап китте.

— Үткән быуаттың 50-се йылдарынан алып бөгөнгәсә башҡорт йәштәренең күбеһе гуманитар белем талап иткән һөнәрҙәргә мөрәжәғәт итә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөнгө йәмғиәттең үҫешен тәьмин иткән һөнәрҙәр — экономистар, менеджерҙар, банкирҙар, сәйәсмәндәр, нефть эшкәртеү, химик һәм башҡа перспективалы тармаҡтар белгестәре араһында беҙҙең йәштәр бик аҙ. Шуға күрә башҡорт йәмғиәте алдында балаларыбыҙҙы милләттең иртәгәге социаль йөҙөн билдәләүсе һөнәрҙәргә йүнәлтеү мәсьәләһе тора, — тип билдәләне Морат Жәлил улы.

Икенсенән, ҡала башҡорттарының һаны башлыса ауылдан килеүселәр иҫәбенә үҫә. Ә улар эшкә урынлашыуҙа, пропискаға инеүҙә ҡыйынлыҡтарға осрай, торлаҡ мәсьәләһе бигерәк тә ауыр тора. Республикалағы башҡа милләт вәкилдәре менән сағыштырғанда, башҡорттарҙың ҡалала ерегеүе күпкә түбән.

Өсөнсөнән, социаль тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, ҡала башҡорттары араһында ҡала мөхитенә яраҡлашҡанда этник-ара бәйләнештәр үтә һүлпән. Электән ҡалала йәшәгән, ошонда тыуып үҫкән башҡорттар менән яңыраҡ ҡына килгәндәр араһында үҙ-ара бәйләнеш, ярҙам булмауы һуңғы сиктә ассимиляцияға сәбәп була.

Дүртенсенән, ҡалала байтаҡ күләмдә булған рус телле башҡорттар мәсьәләһе лә ҙур иғтибар талап итә. Туған телде белмәү арҡаһында милли мәҙәниәттән һәм традицияларҙан ситләшкән булһалар ҙа, уларҙың күбеһе этник үҙаңға эйә. Уларҙы ылыҡтырыу һәм мауыҡтырыу өсөн махсус программа кәрәк.

Бишенсенән, ҡала башҡорттарының мәҙәни-тарихи аң кимәлен үҫтереү мәсьәләһе киҫкен тора, тип иҫәпләй ғалим.

Артабан ул республиканың төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш районларын урбанизациялау һәм Нефтекама, Яңауыл, Бөрө ҡалаларын, ҡала тибындағы ҡасабаларҙы үҫтереү мәсьәләләренә туҡталып китте.

Ҡалала яраҡлашыу, башҡорттарҙың бында үҙҙәрен психологик йәһәттән иркен һәм уңайлы тойоуы өсөн башҡорт теленең тулы ҡанлы файҙаланыуы төп шарттарҙың береһе булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Башҡорттар ҡаланы ныҡлап үҙләштерһен өсөн тағы ла бер ни тиклем ваҡыт кәрәк. Ә был процестың уңышлы барышында ғалимдарҙың, сәйәсмәндәрҙең, архитекторҙарҙың, ижади интеллигенцияның дөйөм тырышлығы мөһим.

Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисамитдинова Башҡортостан ҡалаларындағы тел мәсьәләләре торошона туҡталды.

Ғалимәнең әйтеүенсә, бөгөн Башҡортостан Республикаһы ҡалаларында дөйөм алғанда бер яҡлы ике теллелек өҫтөнлөк ала, сөнки рус телләр, бик һирәк осраҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, тулыһынса тик рус телен генә белә. Башҡорттар һәм башҡа рус булмаған милләттәр күпселектә ике телде лә үҙләштерә. Ике телле ҡала халҡын икегә: ассимиляцияға бирелмәгән һәм ассимиляцияланған төркөмгә бүлергә була. Уларҙың тәүгеләре туған һәм төп тел итеп үҙ этносының телен иҫәпләй, ә икенселәре беренсе һәм туған тел итеп рус телен, йәки икенсе телде атай. Мәҫәлән, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының бер өлөшө татар телен туған теле тип иҫәпләй, сөнки уларҙың өс-дүрт быуыны шул телдә уҡытылды. Шулай ҙа, дөйөм алғанда ҡалалар йайлап, әммә бик ышанысллы рәүештә бер теллелектән ике, ә ҡайһы бер урындарҙа, айырыуса рәсми даирәлә өс теллелеккә (милли тел — рус теле — башҡорт теле) күсә.

Һуңғы йылдарҙа, айырыуса "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законы ҡабул ителгәндән һуң, ҡалаларҙа башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә иғтибар артты. Шуға күрә, тейешле шарттар булдырғанда, киләсәктә милли-рус-башҡорт өс теллелеге етерлек кимәлдә үҫеш алыуы ихтимал.

Пленар ултырыштан һуң конференция үҙенең эшен секцияларҙа дауам итте.

Башҡортостан Республикалары ҡалалары халҡының демография һәм сәләмәтлеге мәсьәләләрен, Башҡортостан ҡалаларында башҡорт теленең торошон, этник һәм мәҙәни процестар һәм ҡала мәҙәниәтен формалаштырыу, уҡыу йорттарында башҡорт телен һәм милли-региональ компонентын тәшкил иткән башҡа фәндәрҙе уҡытыуҙың актуаль проблемаларын өйрәнгән дүрт секция эшләне. Уларҙағы сығыштарҙа был проблемаларҙы яңы аспектта тикшергән үҙенсәлекле сығыштар яңғыраны, фәһемле мәғлүмәттәр, һандар һәм тенденциялар билдәле булды.

Артабан IV төбәк-ара фәнни-ғәмәли конференцияға йомғаҡ яһалып, резолюция ҡабул ителде. Унда ыңғай күренештәр менән бергә хәл ителергә тейешле проблемалар ҙа билдәләнде. Заман алға ҡуйған талаптарҙы хәл итеү өсөн власть даирәләре, академик структуралар, юғары белем биреү учреждениелары, йәмәғәтселек берҙәм эш алып барырға тейеш.

Конференция Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт, Мәғариф министрлыҡтарына, ЗАГС идаралығына, БР Фәндәр академияһына, БР Һаулыҡ һаҡлау, БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлыҡтарына анығ тәҡдимдәр ҡабул итте. Киләсәктә бындай фәнни-ғәмәли конференцияны ике йылға бер тапҡыр үткәреп тороу кәрәклеге теркәлде.

*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА, Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА әҙерләне.*